# МИӘКӘ РАЙОНЫ ДИМ БУЙЫ БАШҠОРТТАРЫНЫҢ ДИАЛЕКТЫ

Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт
гимназия – интернаты
башҡорт теле һәм әҙәбиәте
уҡытыусыһы Исламова З.Х.

Тыуған ер ул –

Баш осоҡа халҡың

Һинең өсөн сатыр ҡорған ер,

Бәп-бәләкәй тыуған йорт йылыһы

Гел һиҙелеп, тойолоп торған ер…

Ерҙә ниндәй генә күҙҙең яуын алырлыҡ урындар юҡ: ағын һыуҙар ҙа, шаулы урмандар ҙа, бейек тауҙар ҙа бик күп. Һәр кешегә тыуып үҫкән ере иң ҡәҙерлеһе, иң яҡыны була. Тамырым менән  Миәкә районы Йәнәби - Урсай ауылы ҡыҙымын.

Миәкә районы Дим буйы башҡорттарының  диалекттарында һаҡланып килгән боронғо формаларҙы, топонимдарҙы яҙма ҡомартҡыларҙың телен һәм әҙәби  тел менән булған бәйәнештәрҙе сағыштырып китеүҙе  төп маҡсатым итеп ҡуйҙым.

Төп бурыстарым:

1) Башҡорт  теленең диаллектары һәм һөйләштәренең классификацияһын өйрәнеү;
2) Көньяҡ диалектына ингән Дим һөйләшенең үҙенсәлектәрен асыҡлау;
3) Әҙәби тел нормаларын райондағы ерле һөйләү теле менән сағыштырып, иң мөһим үҙенсәлектәрен күрһәтеү.

Меңлеләр 18-се быуатта 15 мең кеше булған. Хәҙерге көндә был  һан, әлбиттә, күп тапҡырға артығыраҡ.

Мең башҡорттары 17-19 быуаттарҙа Дим йылғаһы буйында ҙур ғына майҙанда  урынлашҡан.

Мең ырыуының Башҡортостанға күсеп ултырыуы бик ҡатмарлы шарттарҙа барған. 12-13 быуаттарҙа меңдәрҙең ата-бабалары ҡыпсаҡ донъяһының бер

**Отформатировано:** слева:  2 см, справа:  2 см, Расстояние от края до верхнего колонтитула:  1,25 см, Расстояние от края до нижнего колонтитула:  1,25 см

өлөшөн тәшкил иткән. Төп мең еренең ҡала һәм районддарын һанап үтергә булһаҡ, улар түбәндәгеләр: Бишбүләк, Миәкә, Әлшәй, Дәүләкән, Шишмә, Өфө районы, Благовещен, Иглин, Нуриман. Шулай ҙа мендәрҙең төп йәшәгән урыны булып Дим иҫәпләнә. Был тирә малсылыҡ өсөн ифрат уңайлы булған. XV быуатта нигеҙҙә улар ошонда ғүмер иткән. Ләкин нуғайҙарҙың хакимлығы өҫтөнлөк иткән шарттарҙа мендәрҙең хәле тотороҡло булмаған. 17-18 быуаттарҙа Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышына башҡа ҡәбиләләр килә башлай. Шулай итеп, Дим үҙәгенә көньяҡ-көнсығыш райондарынан ғына түгел, хатта төньяҡтан һәм Урал аръяғынан башҡа ырыуҙар килеп ултыра.

Миәкә районы Дим буйы башҡорттарының ерле һөйләштәренең айырылып торған иң мөһим үҙенсәлектәре:

Көньяҡ диалекта **л** өнөнән башланған ялғауҙар шул көйө йөрөй. Тик һүҙҙәр **м, н, ң** өндәренә бөтһә, ялғауҙар **н** менән ҡулланылыуы мөмкин. Миҫалдар: бесәннек, утынныҡ.

Башҡорт теленә хас булған **һ, ҫ, ҙ** өндәре һөйләштәрҙә бер төрлө генә ҡулланылмай. Был өндәр һөйләштәрҙә төрлөсә ҡулланылып, уларҙы айыра торған билдә булып та йөрөтәләр. Билдәле булыуынса, Дим һөләшендә һүҙ һәм ижек башында әҙәби телдәге **һ** өнөнә системалы рәүештә **ҫ** өнө тура килә. Бындай күренеш төрки телдәренә ни бары төрөкмән телендә генә күҙәтелә. Интердентал **ҫ** һәм **ҙ** өндәренең ҡулланылышында Дим һөйләше менән төрөкмән теленең яҡынлығын профессор Ж.Ғ.Кейекбаев X-XII быуаттарҙа Волга – Каспий далаларында йәшәгән һәм Мәхмүт Ҡашғари һүҙлегендә күрһәтелгән ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең тел үҙенсәлеге менән аңлата.

Дим һөйләшендә **ҫ** өнө **һ** өнө урынында ла ҡулланыла: ҫыйыр, ҫарыҡ, ҫыуҫаҫа, туҡҫан, ҫикҫән. Ғәрәп-фарсы һүҙҙәрендә **һ** һаҡлана: һаман, һаyа, гонаһ, һәр саҡ. Беҙҙең фонетикабыҙҙағы **ҫ** һәм **ҙ** өндәре, һис шикһеҙ, уникаль күренеш һәм ул башҡорт теленең инглиз теле менән уртаҡ элементы буларaҡ ғәжәпләнеү тойғоһо тыуҙыра. Өҫтәүенә инглиз телендәге **ҫ** өнө лә, **ҙ** өнө лә, беҙҙең Дим һөйләшендәге кеүек үк, бик үҙенсәлекле өндәр булып иҫәпләнә һәм ул өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен үҙләштереү башҡортҡа уғата еңел бирелә.

Көньяҡ диалектта **–лар, -лыҡ, -лы, -ла** кеүек ялғауҙарҙа **л** өнө күбеһенсә һаҡлана: таллар, атлар, һыйырлар, көйләр, таулар, ташлыҡ, ағаслы, эшлекле, етмешләгән, еүешләй, алтмышлап, ташланыу, туҡланыу, ҡаҡлығыу, башланыу, берләштереү.

**М, н, ң** өндәренән һуң бындай ялғауҙар **н** өнөнә башланыуы мөмкин: унныҡ, тәмне, яннау, иркеннек.

Әҙәби телдә **–лыҡ, -лы, -ла** кеүек һүҙ яһаусы ялғауҙар тик **л** өнөнән башлана. Күплек ялғауы, һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, дүрт төрлө килә**:** **-лар, -дар, -ҙар, -тар**.

Көньяҡ диалект әҙәби телгә яҡыныраҡ булһа ла тап килеп бөтмәй. Әҙәби тел үҙенең нормалар системаһы менән диалекттарҙан өҫтөн тора.

**А** фонемаһы әҙәби телдәге **у** һуҙынҡыһы урынына килеүсән. 3-сө зат ул алмашының килештәр менән үҙгәрешендә был төп килеш асыҡ күренә. Мәҫәлән:

| | **Әҙәби телдә** | **Һөйләштә** |
|---|---|---|
| Төп килеш | ул | ул |
| Эйәлек килеш | уның | аның |
| Төбәү килеш | уға | аңа |
| Төшөм килеш | уны | аны |
| Урын-ваҡыт килеш | унда | анда |
| Сығанаҡ килеш | унан | анан |

Был күренеш сәбәптәрен уҡыусыларға ла аңлатырға кәрәк. Сөнки ошо күренешкә оҡшаған тап килеш Урта Азия, Волга буйы төрки телдәренән тыш тағы ла Алтай диалекттарында (аны-уны, аларҙы-уларҙы, анда-унда) хакас (аны-уны,аға-уға) һ.б. күҙәтелә.

Күп кенә һүҙҙәр алғы рәт һуҙынҡыһы **ә** менән дә, артҡы рәт һуҙынҡыһы **а** менән дә параллель ҡулланыла. Мәҫәлән: асы/әсе, аҡрын/әкрен, сапылдатыу/сәпелдәтеү.

Алғы рәт киң әйтешле **ә** һуҙынҡы **е(э)** фонемаһы урынында һүҙҙең бөтә позицияларында ла килә ала. Мәҫәлән:

| **Әҙәби телдә** | **Һөйләштә** |
|---|---|
| өйәҙеү | өйәҙәү |
| бәрәмес | бәрәмәс |
| этеү | этәү |
| эшкәртеү | эшкәртәү |
| дилбегә | дилбәгә |

Шулай уҡ **ә-и** сиратлашыуы ла Дим һөйләшендә урын алған. Мәҫәлән:

| **Әҙәби телдә** | **Һөйләштә** |
|---|---|
| тәрән | дирән |
| һиҙәп | сәҙәф |

**О, ө** өндәре Дим һөйләшендә тик тәүге ижектә генә асыҡ ишетелә, ижектәр һаны артыу менән **о** һәм **ө** фонемаларының ишетелеш сифаты кәмей барып, **о, ө-е(э)** фонемаһына күсә. Был күренеш Дим буйы башҡорттары араһында яҙып алынған Дим йылғаһына арналған йырҙарҙа асыҡ сағыла. Мәҫәлән:

| **Әҙәби телдә** | **Һөйләштә** |
|---|---|
| Онотолһон | Онытылҫын |
| Йүгерек | Йөгрек |
| Өкө | Өке |
| Өрлөк | Өрлек |
| Өндәшеү | Эндәшеү |

Кемдең ниндәй туған теле, тыуған ере - диалектта шундай.

Әҙәби телдә һуҙынҡынан һуң **л** йәки **н** өндәренән килгән ҡайһы бер ялғауҙар һәм киҫәксәләр Дим һөйләшендә **ҙ** өнөнә башлана. Миҫалдар:

| **Дим һөйләшендә:** | **Әҙәби телдә:** |
|---|---|
| ҡалаҙа | ҡалала |
| кисәгеҙәй | кисәгеләй |
| ҡайҙаҙыр | ҡайҙалыр |
| һәммәҫе ҙә | һәммәһе лә |

**Отформатировано:** По ширине, междустрочный, 1,5 строки

Туған тел - тәбиғәт тарафынан кешенең психологик һәм физиологик төҙөлөшөнә ярашлы итеп тыуҙырылған ҡиммәтле ҡорал. Һандуғасҡа һайрау һәләтлеге тәбиғәт тарафынан бирелгән кеүек, һәр кеше үҙ туған телен еңел өйрәнеү һәм тәрән аңлау һәләтлеге менән тыуа. Шуға күрә телегеҙҙе һаҡлағыҙ, илегеҙҙе яҡлағыҙ.